БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
ЯҘЫУСЫЛАР СОЮЗЫ

ҒАЯН ЛОҠМАНОВ

Өфө – 2013

• ӘҘИП ҒАИЛӘҺЕ •

Яугир яҙыусы Ғаян Лоҡманов һөйөклө ҡатыны Ғәлимә Әғзәм ҡыҙы менән.

• ӘҘИПТЕҢ КҮҢЕЛ НУРЫ БАЛҠЫШЫ •

Үткән быуаттың илленсе йылдарында, «Ленинсы» газетаһында эшләгәндә, Ҡариҙел районы Яугилде урта мәктәбе уҡытыусыһы Ғаян Лоҡманов менән ныҡ аралаштым (ул 1923 йылғы). Редакциялағы тәүге осрашыуҙа унан тормош юлы хаҡында һөйләүен һорағас, ул ҡыҫҡа ғына яуап бирҙе: «Яугилде урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләйем, һуғышта ҡатнаштым». Уның тормош юлы Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үҫеп еткән йәштәрҙең кисергәндәре менән уртаҡ ине. Һуғышҡа тиклем Бөрө педагогия училищеһын тамамлай. 1942 йылда уны Ҡыҙыл Армия сафына алалар. Артиллерия училищеһында уҡып сыҡҡас, артиллерия идара һәм топографик разведка взводы командиры дәрәжәһендә мәкерле немецтарға ҡаршы ҡаты алыштарҙа ҡатнаша. Яу юлдарын үтеүе һәр һалдатҡа үлем янауы менән аҙым һайын осрашыуға бәрәбәр була. Ғаян Лоҡманов етәкселегендә артиллеристар яуыз немецтарға ҡаршы ҡыйыу һуғыша. Бер алыш мәлендә Ғ. Лоҡманов ауыр яралана, 1944 йылда армия сафынан тыуған Яугилде ауылына ҡайтып төшә.

Яу ҡырында ул тыуған яғын һағына, яуыз дошманды еңеп, имен-һау ҡайтыу хаҡында хыяллана. Бигерәк тә үҙенең класташы Ғәлимәне күргеһе, уның менән күңеле түйғансы һөйләшкеһе килә. Улар дүртенсе кластан бергә уҡыйҙар. Егет ҡорона еткәс, Ғаян Ғәлимәне яратыуын һиҙҙертә. Фронтҡа китер алдынан буласаҡ яҙыусы егет Ғәлимәгә үҙенең йөрәк серен аса: «Ғәлимә, көт мине. Беҙ бергә булырға тейеш. Әгәр көтһәң, мин иҫән ҡайтырмын». Күңеле был егеткә эҫенеп йөрөгән ҡыҙ ризалығын бирә, уның һуғыштан имен-һау ҡайтыуын теләп, доға ҡыла. Егет фронтта саҡта улар хатлашалар. Армиянан ҡайтҡас, Ғаян Лоҡманов Яугилде урта мәктәбендә физика һәм математика фәндәрен уҡыта. Ғәлимә Әғзәм ҡыҙы ла ошо уҡ мәктәптә уҡытыусы булып эшләй.

Ғаян менән Ғәлимә 1946 йылдың ҡышҡы каникулында ҡауыша. Кеҫлә буранлы көндә йолаға ярашлы туй үткәрәләр. Ҡыҙ егет өйөнә ҡыңғыраулы аттар егелгән кашовкала килен булып төшә.

Ғаян Лоҡманов бәләкәй сағынан яҙыусы булырға хыяллана. Китаптар уҡый, шиғырҙар яҙа.

– Дүртенсе класта уҡығанда, Ғаян пьесалар яҙа ине, – тип хәтерләй Ғәлимә апай. – Һарыкүл буйында алты мөйөшлө йорт тора ине. Шул беҙҙең театрыбыҙ, клубыбыҙ булды. Шунда Ғаяндың пьесаларын ҡуя инек. Беҙ артистар булып уйнаныҡ. Бала-саға тамаша ҡарарға килде. Өлкәндәр ҙә килгеләй торғайны.

Ғаян Лоҡманов яу ҡырында ла ижад итеүен ташламай. Район газетаһында уның бер нисә шиғыры, «Хат» исемле хикәйәһе баҫылып сыға. Ғаян һуғыштан ҡайтҡас, район газетаһы редакторы С.С.Сәғитов уға: «Ғаян, һиңә проза өлкәһендә эшләргә кәрәк», – тип кәңәш итә. Ул редакторҙың кәңәшен тота, хикәйәләр яҙыуын дауам итә. 1954 йылда «Совет Башҡортостаны» газетаһында уның «Аҡҡош күле» тигән хикәйәһе баҫылып сыға.

ӘҘИП ҒАИЛӘҺЕ

Ғаян Лоҡманов ҡатыны Ғәлимә, ҡыҙы Флүҙә һәм улдары Фәнис, Мансур менән. 1980 йыл.

Ғаян Лоҡманов Өфөгә килгәндә, «Ленинсы» газетаһы редакцияһына иң тәүләп инә торғайны. Яралы кеше оҙон юлдан ныҡ йонсоп килә. Беҙҙең бүлмәлә бик уңайлы кресло булды. Ул шунда йәтешләп ултыра, кинәнеп ял итеп ала. Шунан мин уны буфетҡа сәй эсергә алып инәм. Сәйҙән һуң Ғаян Лоҡман улы менән уның хикәйәләрен тикшерәбеҙ. Тыуған яҡ кешеләренә, тәбиғәткә һөйөү менән һуғарылған хикәйәләре күңелгә бик ятышлы. Мин уның хикәйәләрен «Ленинсы» газетаһы биттәрендә баҫтырып сығарҙым. Ошо хикәйәләрен туплап, Ғ. Лоҡманов 1962 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Аҡҡош күле» тигән беренсе китабын баҫтырып сығарҙы. Ижадтағы был ҙур еңеүе менән Ватан һуғышы ветеранын ихлас ҡотланыҡ. Артабан уның «Ағым һыу», «Әсә йөрәге», «Тирәк шаулай», «Һибелә сәскә» исемле хикәйәләр, повестар китаптары донъя күрҙе. 1969 йылда һәләтле авторҙы СССР Яҙыусылар союзына ағза итеп ҡабул иттеләр.

Ғаян Лоҡманов һәр өлкәлә лә үҙен тырыш, маҡсатҡа ынтылыусан шәхес итеп танытты. 1961 йылда Бөрө педагогия институтының физика-математика факультетын ситтән тороп уҡып тамамланы. Сессиялар ваҡытында ул һәр ваҡытта ла редакциябыҙға килде, яңы әҫәрҙәрен килтерҙе.

Ғаян Лоҡмановтың «Үр менгәндә» повесында Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге ваҡиғалар һүрәтләнә. Тракторсы Зәбир фронтҡа киткәс, уны ҡатыны Мөнирә алмаштыра. Был шул осор өсөн типик күренеш.

«Ағым һыу» повесында Ғаян Лоҡманов бер колхоз йәштәренең тормошон сағылдыра. Улар – тракторсылар, һауынсылар. Улар фиҙакәр эшләй. Автор механизаторҙар хеҙмәтендәге яңы алымдарға баһа бирә, уларҙы алдынғы тәжрибә итеп таратыу яғында.

Ғаян Лоҡмановтың «Ҡояш сығыр алдынан» романы – уның ижади ҡаҙанышы, әҙәбиәтебеҙҙең сағыу әҫәре. Унда 1912 – 1918 йылдарҙағы ваҡиғалар һүрәтләнә. Ярлылар һәм байҙар араһындағы үлемесле көрәш әҫәрҙең төп йөкмәткеһен тәшкил итә. Ваҡиғалар Яубаҫар ауылында бара. Ауыл старостаһы Ҡәйүм, старшина Үрәзмәтов, помещик Красин ауыл ярлыларын үҙҙәренең ҡулы аҫтында бейетеп тота. Ялсы Әнүәр, Ғилман, Хәйретдин кеүек ярлы-ябаға Совет власын урынлаштырыу өсөн йәндәрен аямай көрәшә. Әнүәр менән Өмөгөлсөмдөң үҙҙәренең бәхете, мөхәббәте өсөн ауыр һынауҙар үтеүе уҡыусы күңелен тетрәндерә.

Ғаян Лоҡманов был ҡатмарлы сюжетлы романды яҙыу өсөн материалдарҙы үҙенең тыуған Ҡариҙел районында туплай. Был хаҡта ул ошоларҙы һөйләне:

«Минең үҙемә тыуған ауылымда ғына түгел, ә тирә-яҡ ауылдарҙа йәшәүсе байтаҡ революция ветерандары менән осрашырға, әңгәмәләшергә насип булды. 1918 йылда Новотроицкийҙа, Байҡыла, Артаҡулда, Байҡыбашта булған хәлдәр ҙә күп кенә конкрет мәғлүмәттәр бирҙе. Революционер шәхестәрҙең бик күбеһен өйрәнергә һәм уларҙың уртаҡ синыфтары нигеҙендә дөйөмләштерелгән образдар тыуҙырырға тырыштым. Романдағы Ғилман, Иван Сергеевич, Өмөгөлсөм, Әхмәт һәм башҡалар – тап ана шундай образдар ҙа инде...».

ӘҘИП ҒАИЛӘҺЕ

Ҡәҙерле әсәйҙең иҫтәлек фотоһы. Ғаян Лоҡмановтың әсәһе Зөләйха апай. 1956 йыл.

Әҙиптең улы Мансур Лоғоманов, уның ҡатыны Рәмилә, һеңлеһе Флүзә, Ғаян Лоҡманов исемендәге премия лауреаттары Гүзәлиә Тимершина, Рафиҡ Мостафин һәм Рәис Риянов менән.

Тормошта булған ҡатмарлы ваҡиғалар, үҙҙәренең ҡылған эштәре менән хеҙмәтсән халыҡ алдында абруй ҡаҙанған шәхестәр әҫәрҙең төп геройҙары итеп һайлап алынһа, автор тарафынан ҡыл иләктән үткәрелһә генә, әҫәр уҡыусылар күңеленә юл таба, әҙиптең дәрәжәһен күтәрә. Ғ. Лоҡманов ана шундай яҙыусы булды.

Әҙиптең ҡатыны Ғәлимә апай, ҡыҙы Флүзә, улы Мансур, уның ҡатыны педагог Рәмилә һәм ейәндәре яҙыусының ижади мираҫын ҡәҙерләп һаҡлайҙар, әҙәби осрашыуҙарға ихлас йөрөйҙәр. Мансур Ғаянович Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған, билдәле геофизик, фән кандидаты, ҙур ғына фәнни-производство предприятиеһы етәксеһе. Ул 70-ләгән фәнни хеҙмәт, шул иҫәптән 10-дан артыҡ уйлап табыу авторы. Уға «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған нефтсеһе» тигән хөрмәтле исем бирелгән. Ул районды Ғаян Лоҡманов исемендәге премияның спонсоры ла. Әҙиптең ҡыҙы Флүзә Яугилде урта мәктәбендә физика һәм математика фәндәрен уҡыта.

Ғаян Лоҡмановтың өлкән улы Фәнис атаһы һөнәрен һайланы: 20 йылдан ашыу Ҡариҙел район гәзите редакцияһында журналист, әҙәби хеҙмәткәр булып эшләне.

Үткән быуаттың 70 – 80 йылдарында уның хикәйәләре район, ҡала, өлкә гәзит-журналдарында баҫылып сыҡты. Ә 1985 йылда «Дуҫлыҡ ҡәҙере» тигән беренсе китабы донъя күрҙе.

Әммә, үкенескә ҡаршы, ҡаты ауырыу сәбәпле, уның ғүмере лә, ижад юлы ла бик ҡыҫҡа булды.

Ҡариҙел районында яҙыусы яугир Ғаян Лоҡмановты элек тә нык ихтирам иттеләр, хәҙер ҙә уның иҫтәлеген, ижадын ҡәҙерләйҙәр. Район хакимиәте Ғаян Лоҡманов исемендәге әҙәби премия булдырҙы. Район тормошон, уның тарихын, эшсәндәренең көндәлек эштәрен художестволы әҙәбиәт кимәленә күтәреп яҡтыртҡан яҙыусы, журналист Рәис Риянов был премия менән беренсе булып бүләкләнде.

Миңә Ғаян Лоҡмановтың ике юбилейын үткәргәндә Яҙыусылар союзы делегацияһы етәксеһе булырға тура килде. Юбилей кисәләре матур әҙәби байрамдар итеп үткәрелде. Уларҙа район хакимиәте етәкселәре һәр ваҡыт ҡатнашты. Район хакимиәте башлығы Илдар Мусин, уның урынбаҫары Илдар Ғарифуллин районҙағы яҙыусыларға һәр ваҡыт ярҙам итеп торалар, әҙәби осрашыуҙарҙы, юбилей кисәләрен үткәрергә даими булышалар. Йәш әҙиптәр Заһит Мурсиев, Гүзәлиә Тимершина, Йомабикә Солтанова һәм башҡа авторҙар изге күңелле, әҙәбиәтте, мәҙәниәтте ҡәҙерләгән етәкселәргә ихлас рәхмәт әйттеләр. Был изгелеккә Яугилде яҙыусыһы, яугире Ғаян Лоҡмановтың мәңгелек күңел нуры балҡышы ҡанат ҡуялыр.

Рәшит Низамов, яҙыусы,
Башҡортостан Яҙыусылар союзының
өлкән әҙәби консультанты.

• УВЕКОВЕЧИЛИ ИМЯ ЗЕМЛЯКА •

В Караидельском районе с уважением относятся к деятелям литературы и искусства. Регулярно проводятся литературные фестивали, конкурсы. Администрация района поддерживает местных литераторов. Благодаря этому многие авторы издали свои книги.

Земляки гордятся писателем Гаяном Лукмановым. В школах, домах культуры проводятся литературные вечера, посвященные его жизни и творчеству. Администрация района учредила литературную премию имени Гаяна Лукманова. Эта премия была присуждена известным писателям и журналистам. Сын писателя, руководитель научно-производственной фирмы, кандидат технических наук Мансур Гаянович Лугуманов является спонсором этой почетной премии. Мансур Гаянович к юбилею отца издал первый том избранных произведений отца, куда включены роман и рассказы.

Глава администрации Караидельского района Ильдар Мусин вручает литературную премию имени Гаяна Лукманова журналисту Рафику Мустафину.

Командир взвода артиллеристов, лейтенант Гаян Лукманов. 1942 год.

Писатели Башкортостана и родственники Гаяна Лукманова во время юбилейных литературных мероприятий.

• ЛЮБИЛ ЛЮДЕЙ РОДНОГО КРАЯ •

Писатель Гаян Лукманович Лукманов родился 30 июня 1923 г. в деревне Явгильды Караидельского района Башкортостана. После окончания в 1942 г. Бирского педучилища был мобилизован в армию. Окончил училище по подготовке артиллеристов. Командир взвода Г. Лукманов участвовал в жестоких боях против коварных немецких захватчиков. Демобилизовался из армии в 1944 г. по болезни. Работал учителем, завучем. В 1951 г. заочно окончил Бирский пединститут. В 1954–1959 гг. работал заведующим библиотекой.

Первый рассказ Г. Лукманова «Письмо» был опубликован в 1944 г. В 1962 г. автор выпустил первый сборник рассказов «Лебединое озеро».

В ряде рассказов и повестей Г. Лукманова повествуется о жизни и быте жителей деревни, ставятся острые социальные, нравственно-этические проблемы в жизни современного земледельца.

Г. Лукманов является автором восьми сборников повестей, рассказов и романа «Перед восходом солнца» (1983).

Награжден орденом Отечественной войны II степени и боевыми медалями.

Книги Гаяна Лукманова:

Лебединое озеро: Рассказы. Уфа: Башкнигоиздат, 1962. 70 с. Башк.
Текучая вода: Повесть. Уфа: Башкнигоиздат, 1964. 116 с. Башк.
Материнское сердце: Повесть и рассказы. Уфа: Башкнигоиздат, 1966. 70 с. Башк.
Шумит тополь: Рассказы. Уфа: Башкнигоиздат, 1970. 160 с. Башк.
Цветы осыпаются: Повесть и рассказы. Уфа: Башкнигоиздат, 1973. 232 с. Башк.
Перед восходом солнца: Роман, повесть, рассказы. Уфа: Башкнигоиздат, 1983. 414 с. Башк.
Запах сена: Рассказы. Уфа: Башкнигоиздат, 1986. 28 с. Башк.
Избранные произведения. I том. Роман, рассказы. Уфа: Издательство «Мир печати», 2013. 372 с. Башк.

Ғаян Лоҡмановтың балалары, туғандары.
Беренсе рәттә, уңдан һулға: әҙиптең улы Мансур, ейәнсәре Айгөл, ҡатыны Ғәлимә, ейәне Азат, килене Рәмилә. Икенсе рәттә, уңдан һулға: ейәне Алмаз, кейәүе Әнфис, ейәне Эльвир, ҡыҙы Флүзә һәм ейәне Айрат. 2009 йыл.

ГАЯН ЛУКМАНОВ
БУКЛЕТ
Редактор-составитель, оформление, макет — Рашит Низамов.

Уфа. 2013. Тираж 800 экз. Заказ № 414. КП РБ Издательство «Мир печати». Тел. 251-72-95.